Киләсәк һинән башлана

# Йәншишмә

№41 (6909)

13 октябрь, йома, 2023 йыл.

0+

БАШҠОРТОСТАН БАЛАЛАР ҺӘМ ҮҪМЕРҘӘР ГӘЗИТЕ

Гәзит 1930 йылдың 12 февраленән нәшер ителә. Йома көнө сыға.

Беҙҙең сайт: www.yanshishma.com E-mail: yanshishma02@yandex.ru

Ойоштороусылары – Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, «Башҡортостан Республикаһы» нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы.


КОНКУРС КОНКУРС КОНКУРС КОНКУРС

## Еңеүселәрҙе ҡотлайбыҙ!

**Ниһайәт, «Минең өс айым» тип исемләнгән йәйге конкурсҡа йомғаҡ яһар ваҡыт етте. Әйтергә кәрәк, бәйге әүҙем генә барҙы. Төрлө-төрлө матур йөкмәткеле хаттар алып һөйөндөк. Шулай уҡ был юлы малайҙарҙың күпләп ҡатнашыуы ла беҙҙе ҡыуандырҙы.**

Редакцияға килгән хаттарҙың барыһы ла гәзитебеҙҙә, «Бәйләнештә» социаль селтәрендәге төркөмөбөҙҙә баҫылып сыҡты. Бәйгеселәр араһында хатта өсөшәр яҙма ебәреүселәр бар ине. Тағы ла шуныһын әйтергә кәрәк: быйылғы мәҡәләләрҙе икенсерәк баһаларға булдыҡ. «Бәйләнештә»ге төркөмдә ҡуйылған яҙмаларҙың ҡайһыһын күберәк уҡығандар, күпме лайыҡ йыйылған – шуны ла иҫәпкә алдыҡ.




Шулай итеп:

**I урын – Ирхан ТАҺИРОВ (Баймаҡ районы, Аҡморон мәктәбе), «Һыйыр көтөү еңел түгел икән»** мәҡәләһе өсөн.

**II урын – Алтынай АҠМАНОВА (Сибайҙағы Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейы), «Онотолмаҫ сәйәхәт», «Һыуыр менән осрашыу», «Төлкөмө, айыумы?»;**

**Тамерлан ЗАРИПОВ, йәш хәбәрсе (Туймазы районы, Серафимовка мәктәбе), «Тышаулы әтәс».**

**III урын – Кәримә АҠМАНОВА (Сибайҙағы Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейы), «Алтын себеш»;**

**Раян СӘЙЕТОВ (Аҫҡын районы, Аҫҡын ауылындағы 2-се мәктәп), «Мәскәүҙән – еңеү менән!»;**

**Салауат ХӘЙБУЛЛИН (Белорет ҡалаһы, 21-се мәктәп), «Төлкө менән осрашыу».** Ул хатта һүрәтен дә төшөрөп ебәргән ине.

Ә бына **Сәлимә** менән **Нурсолтан ХӘСӘНОВТАРға (Өфө, 82-се гимназия) «Роботтар донъяһында»** мәҡәләһе өсөн дәртләндереү призы тапшырыласаҡ.

Бәйгегә иң тәүге булып хат ебәргәне өсөн **Таһир РӘХИМОВ (Ауырғазы районы, Рәшит Назаров исемендәге Талбазы башҡорт гимназияһы, «Иң ҡыҙыҡлыһы – мал көтөү»)** махсус бүләк аласаҡ.

Еңеүселәрҙе ҡотлайбыҙ! Уларҙы редакцияның **Почёт грамотаһы** һәм **иҫтәлекле бүләге** көтә.

*Зөһрә ХӘКИМОВА, хаттар бүлеге хәбәрсеһе.*




АВТОР фотоһы.

КОНКУРС КОНКУРС КОНКУРС КОНКУРС



**СӘСКӘ АТ, БАШҠОРТОСТАНЫМ!**

*Сәминә ӘХМӘТОВА, III «Б» синыфы уҡыусыһы.*

***Туймазы районы, Серафимовка мәктәбе.***

## Яҙыл да бүләк от!

Ҡәҙерле дуҫтар! Әле гәзит-журналдарға 2024 йылға яҙылыу бара. Әйҙәгеҙ, киләһе йылды ла «Йәншишмә» менән бергә үткәрәйек! Шуныһы шәп: беҙҙең гәзиткә бер йылға ла яҙылырға була. Улай арзаныраҡ!

«Йәншишмә»нең электрон версияһына яҙылыу күпкә отошло: ярты йылға – **378 һум** ғына. Ул сағында гәзиттең һәр һаны PDF форматында **rbsmi.ru** сайтындағы шәхси кабинетығыҙға киләсәк.

«Йәншишмә»гә өйҙән сыҡмай ғына яҙылырға мөмкин. Бының өсөн смартфонығыҙ йә планшетығыҙ ярҙамында ошо QR-кодты сканерлағыҙ.

«Йәншишмә»гә алты айға йәки бер йылға яҙылыусылар **«Яҙыл да бүләк от!»** уйынында ҡатнаша ала. Квитанцияның күсермәһен **«Бәйләнештә» социаль селтәрендәге «Йәншишмә» төркөмөнә** йә редакцияның **yanshishma02@yandex.ru** электрон почтаһына ебәреү етә. Бергә булдыҡ, бергә ҡалайыҡ, дуҫтар!

**«Йәншишмә»гә бер айға яҙылыу хаҡы – 110 һум 64 тин, ярты йылға – 663 һум 84 тин. Индексы – П2765**
**Бер йылға – 1 мең 220 һум 8 тин. Индексы – П3371.**

pbpisk.pochta.ru

# Изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ

**Тәм-томдар, сәйләндән биҙәүестәр, күҙ яуын алырлыҡ банттар… «TAU CETI» мәктәбендә ойошторолған хәйриә йәрминкәһендә балаларҙың теләп ҡатнашыуы һөйөндөрҙө. Иң мөһиме – улар йыйған аҡсаларын сәләмәтлектәре насар булған тиҫтерҙәрен дауалау өсөн күсерҙе.**

Был мәктәптең етәкселәре – Булат Яҡшыбаев менән Анастасия Лапшина. Булат Роберт улының йәнә дүрт балалар баҡсаһы бар. Инде бына бына дүрт йыллап уларҙа хәйриә акцияһы ойошторола. Ата-әсәләр менән бергәләп хосписта ятыусы балаларға ярҙам итәләр: макулатура тапшырып, аҡса күсерһендәрме, гигиена әйберҙәре йыйһындармы… Ә быйыл «TAU CETI» мәктәбе лә изге сараға ҡушылды.

Йәрминкәлә печенье һәм алма бәлеше тәҡдим итеүсе ҡыҙҙар менән һөйләшәм. 45-се мәктәптә белем алыусы Карина менән Әмирә Булат Роберт улының ҡыҙҙары булып сыҡты.

– Бер тапҡыр бешереп ҡараным да печеньены өйҙәгеләргә тәмләттем. Оҡшаттылар. Шуға йәрминкәгә лә килтерҙем, – ти Әмирә.

Ә Каринаға өләсәләре шарлотка рецебын биргән. Бешереп ҡараған, тәмле килеп сыҡҡан. Был ҡыҙҙар – ғаиләлә ҙурҙары, барлығы биш бала тәрбиәләй Булат Роберт улы менән Зөлфирә Зөфәр ҡыҙы. Карина һүрәт төшөрөргә ярата, Әмирә пианино түңәрәгенә йөрөй. Яҡшы уҡыйҙар. Камилә һеңлеләре I синыфҡа төшкән, ә Эмилия менән Кәрим мәктәпкә бармаған әле. Күмәкләп йыйылғанда өҫтәл уйындары уйнарға яратабыҙ, ти ҡыҙҙар.



Көҙ апай күңелле уйындар уҙғарҙы.

Башҡа һатыусылар ҙа тауарын ихлас тәҡдим итте. Бер аҙҙан балаларҙы Көҙ апай йыйып алды. Күңелле итеп уйнап, төрлө «һынау»ҙар үтеп, дуҫлыҡ шәме яндырҙылар. Артабан күләгәләр театры спектаклен ҡарарға ултырҙылар.

Әйткәндәй, Лилиә Мөхәмәтшина һәм Елена Коркешко етәкләгән «Балаҫтағы театр» менән мәктәп күптән хеҙмәттәшлек итә. Улар бәләкәстәргә йыш ҡына бушлай тамаша ойоштора.

Йәрминкәлә ҡатнашыусылар араһында бер нисә сәғәт эсендә дуҫтарса мөнәсәбәт булдырылды. Бергәләп сәй эстеләр. Балалар ауырымаһын, йыйылған матди ярҙам аҙыраҡ булһа ла хәлдәрен еңеләйтһен ине.

*Лилиә МӘҮЛИТОВА.*
*Өфө ҡалаһы.*







АВТОР фотолары.

Йәрминкәлә төрлө тауар тәҡдим ителде.



# Батшалар ҙа эшләй алмаҫ ғәмәл

Бер батша үҙенең аҡыллы һәм киң күңелле булыуы менән дан алған. Ул бик бай, шул уҡ ваҡытта йомарт, талапсан, әммә киң күңелле булған. Бөтә аҡыл эйәләре уның сифаттарына һоҡланған, хатта дошмандары ла быны танған.

Бер ваҡыт батша янына вәзире килгән дә күңелһеҙ хәбәр еткергән:

– О, бөйөк батшабыҙ! Илебеҙ халҡы һинең аҡыллы һәм көслө икәнеңде белә. Даның бөтә ҡалаларға һәм ауылдарға таралған. Хөкөмдәрең ҡаты, әммә ғәҙел. Хатта дошмандарың да һинә дан йырлай. Ә шулай ҙа һинең хаҡта насар һөйләүселәр ҙә бар. Һинә ҡарата әйтелгән шундай ғәҙел булмаған тәнҡитте, нахаҡ һүҙҙәрҙе ишетергә тура килде. Бөйөк батшабыҙ! Ошондай буйһонмауға нисек түҙеп тораһығыҙ? Быға ҡарата ниңә бер ниндәй ҙә сара күрмәйһегеҙ?

Батша йылмайған да шулай яуап ҡайтарған:

– Минең турала насар һөйләүҙәре түгел, ә үҙемдең изгелек эшләүем мөһим! Илем алдында һәм ҡул аҫтымда эшләүселәргә ҡарата күрһәткән хеҙмәттәремде бөтә батшалыҡта ла яҡшы беләләр. Мин етәкселек иткән осорҙа илебеҙ көслө һәм бай булды. Күпселек халыҡ ғәҙеллегем, изгелегем өсөн ярата. Минең көсөм ҙур һәм, ысынлап та, күп нәмә эшләй алам. Дошмандарымды ла еңәм, бәхәстә лә ғәҙеллекте яҡлайым. Тотош дәүләт менән аҡыллы етәкселек итәм. Илебеҙҙең бөтә ҡалаларына ла, ауылдарына ла ҡапҡаларыбыҙҙы аса ла, яба ла алам. Тик минең бер нәмәне генә эшләргә ҡулымдан килмәй. Ул да булһа – яуыз уйлы кешеләрҙең ауыҙын яба алмайым.

***Беҙҙең тормошта ла шундай хәлдәр күҙәтелә түгелме? Ниндәй генә яҡшы кеше, етәксе булһа ла, уның хаҡында ниндәйҙер алама хәбәр таратыусылар осрап тора. Быъа иътибар итергә кәрәкмәй әлеге батша шикелле. Иң мөһиме: үҙ эшеңде белергә, ъәҙел, намыҫлы булырьа кәрәк. Шул саҡта барыбер кешеләр һине белә һәм ярата. Көнсөлдәрҙең һүҙҙәренә иътибар итмәй, саф күңел менән йәшәһәң, ҡылъан ъәмәлдәрең барыбер йәшәйәсәк, ә юҡ-бар һүҙҙәр, кәбәк шикелле, елгә осоп тараласаҡ.***

А. НИЯЗОВ.

# Тимурсылар өлгө күрһәтә

**Әбделмәмбәт мәктәбендә V – XI синыфтар бербереһе менән ярыша-ярыша ветерандарға ярҙамға йөрөй. Улар тимурсы булыуҙары менән ғорурлана. «Инәйҙәр һәм олатайҙар өсөн ауыр булған эштәр беҙгә күңелле уйын һымаҡ ҡына», – тиҙәр.**

VIII синыф уҡыусылары (***һүрәттә***) күптән түгел Яхиндар ғаиләһенә картуф йыйып алышыуҙарын ҡыуанып хәтерләй:

– Мәктәбебеҙҙең ветеран уҡытыусыһы Рәсимә Нуриман ҡыҙы менән урман хужалығы ветераны Рауил Сәлимйән улының балалары алыҫта йәшәй. Беҙ уларға ярҙам иттек. Бергәләп тиҙ генә эште тамамлағас, хужабикә тәмле аштар менән һыйланы, ә Рауил Сәлимйән улы тәбиғәткә бәйле ҡыҙыҡлы хәтирәләрен һөйләне. Ветерандар беҙҙе рәхмәт әйтеп оҙатып ҡалды.

Директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Гөлфинә Ҡасимова әйтеүенсә, өлкән синыфта уҡыған тимурсылар ауылдаштарына утын ярып һәм өйөп бирә, ҡышҡыһын ҡар көрәшә, ә V – VIII синыфтыҡылар иҙән йыуыу, картуф ҡаҙыу кеүек эштәрҙе башҡара. Әбделмәмбәт ауылынан байтаҡ ир-егет махсус хәрби операцияла ҡатнаша, тимурсылар уларҙың ғаиләләренә лә ярҙам итергә өлгәрә.

*Нурзиә ХӘСӘНОВА.*
*Бөрйән районы.*



podpiska.pochta.ru




# Ҡыҙҙарға – селтәр, малайҙарға – түбәтәй



Бына Әбйәлил районы Асҡарҙағы Таһир Күсимов исемендәге гимназияның шайморатовсылар синыфы технология дәресендә башҡорт биҙәүестәренә арналған «Селтәр»проектын башлап ебәргән. Әйҙәүселәре – Раушания Раил ҡыҙы Аҡбулатова (технология уҡытыусыһы) һәм алтынсыларҙың атай-әсәйҙәр комитеты етәксеһе Гөлнәзирә Садиҡ ҡыҙы Теләүғолова.



**Заман менән заман уралған, ти ҡобайыр. Ысынлап та, улар айырылғыһыҙ. Шул хаҡта Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ғайса Хөсәйенов: «Үткән заманды белмәй, хәҙергене төшөнөү ҡыйын икән, хәҙергене аңламайынса, киләсәкте күреү мөмкин түгел», – тип яҙа бит. Бик хаҡ һүҙҙәр.**



**Раушания Раил ҡыҙы уҡыусыларының эше менән ҡәнәғәт.**

Шайморатовсылар синыфындағы ҡыҙҙар үҙҙәренә зауыҡлы һәм заманса селтәрҙәр эшләп алған. Башта улар ҙур ҡыҙыҡһыныу менән башҡорт халҡының милли биҙәүестәрен өйрәнгән. Төрлө сығанаҡтан эҙләнеп, күп нәмәгә төшөнгәндәр. Бик әһәмиәтле дәрес булған. Хәҙер был синыф ҡыҙҙары бер иш кенә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүес әйберҙәрен тағып йөрөй. Тиҙҙән малайҙар өсөн түбәтәй тегә башлаясаҡтар.

Бик матур күренеш! Башҡорт халҡының мәҙәниәтенә, сәнғәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятҡан һәм һөйөү тәрбиәләгән уҡытыусылары менән атай-әсәйҙәр комитетына һоҡланмау мөмкин түгел. Афарин!

# Хеҙмәткә таянған таймаҫ

**Балаларҙы эшкә өйрәтеү, уларҙа хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү – барыһы ла ғаиләнән килә. Эйе, бала өйҙә ололарға ярҙам итеп, эш ҡәҙерен белеп үҫергә тейеш. Шул саҡта ғына ул эшһөйәр, уңған һәм тырыш була.**



**Сулпан.**

Ауырғазы районы Рәшит Назаров исемендәге Талбазы башҡорт гимназияһының II синыф уҡыусыларын маҡтағы килә. Үҙҙәре бәләкәй генә булһалар ҙа, бер ҙә эштән ҡурҡып тормайҙар бит әле.

**Сулпан Ғәлиуллина** ағаһы Ислам менән – ата-әсәһенең иң уңған ярҙамсылары. Йәй буйы баҡсала һәм теплицала күпләп йәшелсә үҫтерешеп, мул уңыш йыйып алғандар. Ғаиләләре менән бергә йәйгеһен – еләк, көҙөн мул итеп бәшмәк йыйып, ҡышҡылыҡҡа әҙерләп тә өлгөргәндәр.

**Айхан Ғималдинов** та һынатмай. Ағаһы Айназ, ҡустыһы Айзат менән эшкә өйрәнеп үҫеп килә. Айхан – үҙе етеҙ, йылғыр, өлгөр малай. Тиҙ генә ҡушҡан эште еренә еткереп үтәп тә ҡуя икән. Әле картуф алыу, ҡабаҡ ташыу эштәрен «һә» тигәнсе башҡарып та ҡуйғандар.

Шулай уҡ **Аяз Шәмсетдинов** та ғаиләлә өс малай араһында – уртансыһы. Ағаһы Алмаз менән атаһына мал ҡарашырға ярҙам итә. «Аҙна буйы интернатта йәшәп уҡығас, йорт эштәрен һағынып ҡайтам. Ял көндәрендә атай-әсәйгә ярҙам итәм», – ти ул.

**Илдар Хәсәнов** та – шәп малай. Ул ҡустыһын гел ҡарап ҡына йөрөтә. Тиҙ генә атаһына ла ярҙамлашырға өлгөрә. Бигерәк тә бәшмәккә йөрөргә ярата икән. Уны дөрөҫ йыйырға өйрәнеп алған.

**Богдан Привалов** – ғаиләлә берҙән-бер малай. Апаһы Виктория һәм һеңлеһе Элинаға терәк. Өләсәһенә бара һалып, баҡсаны сүп-сарҙан, иҫке япраҡтарҙан таҙартып ҡайта.

Быйыл ғына ошо белем усағына килгән **Асҡар Маликов** – ихлас, аралашыусан бала. Өйҙә лә, гимназияла ла ҡулынан килгәнсе ярҙам итергә генә тора. Бигерәк эш һөйөүсән үҙе.

Бына ошолай бәләкәйҙән эшкә өйрәнеп үҫә кескәй талбазылар. Үҙебеҙгә лә бит бала саҡта атай-әсәйҙәр: «Эшләгәнең беҙҙең өсөн булһа, өйрәнгәнең үҙең өсөн», – тип әйтә торғайны. Шулай инде, кем хеҙмәткә күнмәй, шуға бәхет ҡунмай...



**Илдар.**



**Богдан.**




**Асҡар.**



**Айхан.**



**Аяз.**

*Махсус битте Зөһрә ХӘКИМОВА әҙерләне.*

# «Башҡортостан – тыуған ерем»

**Зубов ауылындағы «Белем» мәғариф үҙәге балалар баҡсаһының әҙерлек төркөмөндә күңелле иртәлек үтте. Ул Республика көнөнә арналып, «Башҡортостан – тыуған ерем» тип аталды.**





Кескәйҙәргә байрам нык оҡшаны. Улар республика символдары тураһында, флагтағы төҫтәрҙең нимә аңлатыуын белде. Ғорурлыҡ менән Башҡортостан гимнын тыңланылар. Бергәләп Тыуған ил тураһында башҡорт һәм урыҫ телдәрендә йырҙар башҡарҙылар, шиғырҙар һөйләнеләр.

Чесноковка балалар сәнғәт мәктәбенең ҡурай синыфы уҡытыусыһы Вәсил Темировтың килеүе кескәйҙәр өсөн сюрприз булды. Ҡәҙерле ҡунаҡ уларға ҡурай мондарын уйнап ишеттерҙе.

Балаларға башҡорт милли уйындарында ҡатнашыу ҙа ҡыҙыҡ ине. Рәхәтләнеп күңел астылар.

*Гөлнара ТЕМИРОВА,*
***музыка етәксеһе.***
*Өфө районы.*



# Дамирҙан янғын һүндереүсе сыға

Ауылдарҙа ла янғын сығып ҡына тора. Күп осрақта халыҡ үҙе ғәйепле. Аҙағын уйлап тормай, картуф һабағы, кипкән үлән, япраҡ яндыралар ҙа ҡараусыҙ ҡалдырып китәләр. Ә ябай ғына янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен иҫтә тотмау, үтәмәү күп юғалтыуҙарға, бәләләргә килтерә. Шуны онотмаһаҡ ине.

Быны әле яңыраҡ Иҫке Этекәй ауылында ла тап шундай бәлә сыҡты. Ярай әле халыҡ уяу, берҙәм булып, янғынды тиҙ генә һүндерә алды. Унда ололар менән бергә 10 йәшлек Дамир Бикҡолов та йүгереп йөрөп тырышты, ҡыйыулыҡ күрһәтте. Янғынға ҡаршы көрәштә ауылдаштарын һоҡландырҙы.

– Был малайҙан бына тигән янғын һүндереүсе сыға! – тип мактанылар үҙен.

Афарин, Дамир! Шундай йәш батырҙар булыуы ҡыуандыра.

***Рәйсә ИСЛАМҒОЛОВА,***
***башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.***
*Ауырғазы районы, Талбазылағы лицей.*

# Яугир килде ҡунаҡҡа

**Күмертауҙағы Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Рәхимов исемендәге 3-сө республика башҡорт интернат-гимназияһының V «Б», VI «Б» шайморатовсылар синыфтары махсус хәрби операцияла катнашкан яугир менән осрашыу үткәрҙе. Улар янына танк һәм БМП-ла механик-водитель булып хеҙмәт иткән өлкән сержант Рөстәм ЗАҺИҘУЛЛИН килеп етте. Ағайҙарын көтөп алдылар, сөнки ул ошо белем усағының сығарылыш уҡыусыһы икән.**



Әлеге ваҡытта яугир Башҡортостанда төҙөлгән батальонда хеҙмәт итә. Батырлығы өсөн республика Башлығы Радий Хәбиров ҡулынан Шайморатов ордены һәм иҫтәлекле ҡул сәғәте алып һөйөнгән. Шулай уҡ унын Суворов миҙалы ла бар.

– Осрашыу балаларға нык оҡшаны. Улар үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарын яуҙырҙылар ғына. Рөстәм ағайҙары һәр һорауға ихлас яуап биреп, балалар күпте белеп ҡалды. Ысын дуҫтар, атайәсәйҙең, тыныс тормоштоң ҡәҙерен белеү кәрәклеге тураһында һөйләгәндә уны йәш шайморатовсылар йотлоғоп тыңланы. Ошо яуҙа физкультура, информатика һәм башҡорт теле уҡытыусыларының дәрестәре, бирген кәңәштәре бик кәрәк булыуы хаҡында ла телгә алып үтте яугир. Яратҡан уҡытыусыһы Хәҙисә Ғимран ҡыҙы Кинйәбаеваға рәхмәт һүҙҙәрен дә еткерҙе ул.

Быйыл ғына гимназияға килгән V «Б» синыфы уҡыусыларына ҡарап һоҡланып ҡуйҙым. Улар һорауҙарын төплө генә итеп биреп, һәр яуапты иғтибар менән тыңлап ултырҙы. Тағы ла ағайҙарына матур теләктәр әйтеп, тиҙерәк имен-һау әйләнеп ҡайтыуын теләнеләр, – ти синыф етәксеһе Гүзәлиә Фәрит ҡыҙы Йыянбаева.

Осрашыу һинә, оҡшанымы, тип ҡыҙыҡһынам V «Б» синыфы уҡыусыһы Байрас Ялсығоловтан.

– Беҙ алдан әҙерләндек, шиғырҙар ятлап ҡуйҙыҡ. Рөстәм ағай менән осрашыу бик тулҡынландырғыс булды. Сөнки ул яуҙағы дуҫтары, ғаиләнен һағыныуҙары хаҡында ла һөйләне. Ағай беҙгә: «Тырышып уҡырға, спорт менән дуҫ булырға кәрәк», – тине. Һөйләгәндәрен тыңлаһаҡ, Рөстәм ағай менән ғорурланып ҡуйҙым. Унын насар ғәҙәттәре булмауы, йәғни тәмәке тартмауы, зарарлы эсемлектәр менән мауыҡмауы беҙгә өлгө инде. Яугир ағайға һаулыҡ теләйбеҙ, илебеҙҙә тиҙерәк тыныслыҡ урынлашһын! – тине ул.

Бына шундай иҫтәлекле, күңелгә үтеп инерлек осрашыу булды. Йәш шайморатовсылар ҙа ҡыйыу, илһөйәр булып үҫерҙәр әле.

***З. ИҪӘНДӘУЛӘТОВА.***



podpiska.pochta.ru

# Ҡабырғатауға туҡтамай үтмәгеҙ...

**Уҙған аҙнала Күгәрсен районында күренекле кәләмдәштәребеҙ Венер һәм Рәмил Йәнбәковтарҙы иҫкә алыу саралары үтте. Иҫтәлекле осрашыуҙар Йәнбәковтар тыуып үҫкән Дауыт-Ҡайып, шулай уҡ Теләүембәт, Тәүәкән ауылдарында булды. Унда Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты, «Оло Эйек» яҡташтар ойошмаһы рәйесе, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика башҡорт интернат-гимназияһы директоры Илнур Сәлихов, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, Башҡортостан Яҙыусылар союзы вәкилдәре, Йәнбәковтарҙың туғандары, дуҫтары, кәләмдәштәре, ауылдаштары, ижадтарын ихтирам итеүселәр ҡатнашты.**



Теләүембәттә осрашыуҙан һуң.

Беҙҙе Тәүәкән ауылы хакимиәте башлығы Булат Ҡаразбаев етәкселегендә Дауыт-Ҡайып ауылы халҡы, ағинәйҙәр икмәк-тоҙ, йыр-бейеү менән әйҙүкләп ҡаршыланы. Тәүҙә Венер, Рәмил Йәнбәковтарҙың ҡәберҙәренә зыярат ҡылдыҡ. Унан ауылдың мәҙәниәт йортондағы таҡтаташҡа сәскәләр һалдыҡ, ауыл халҡы сәй табынына саҡырҙы. Фойеға музей экспонаттары ҡуйылғайны. Рәмил Йәнбәк тәбиғәте, фиғеле менән, үҙебеҙсә әйткәндә, «шығырҙап торған ҡыпсаҡ» ине. Музей экспонаттары араһында күпселектә башҡорттоң боронғо яу ҡорамалы, эйәр-өпсөнө булыуы ла шуға ишара. Хәйер, тарихсы Салауат Хәмиҙуллин әйтмешләй, яугир халыҡтың ғына тарихы һәм шул тарих хаҡында һөйләрлек Венер атлы журналисы, Рәмил атлы шағиры булалыр.



Ҡунаҡтарҙы ҡаршылау.

Артабан Теләүембәт күп функциялы мәҙәниәт үҙәгендә «Мин тыуғанмын тик бер балҡыр өсөн...» тигән кисә үтте. Унда ҡатнашыусылар Йәнбәковтар хаҡында йылы тәьҫораттары менән уртаҡлашты. Бигерәк тә Рәмил Йәнбәк менән студент һурпаһын бергә татыған атаҡлы бейеүсе, Башҡортостандың халыҡ артисы Риф Ғәбитовтың Йәнбәк стилендә ярым юмор, ярым етдилек менән сығыш яһауы ауыл халҡының күңеленә хуш килде. «Йәншишмә» гәзите баш мөхәррире Мирсәйет Юнысов Венер һәм Рәмил Йәнбәковтарҙың башҡорт балалары матбуғатын үҫтереүгә индергән өлөшө хаҡында әйтеп үтте.

Кисәлә шулай уҡ «Ағиҙел» журналы редакцияһы уҙғарған




Рәмил Йәнбәктең ижадына арналған «Мөхәббәттән, беләм, тыуғанмын мин...» шиғыр һөйләү видеоконкурсына йомғаҡ яһалып, еңеүселәргә дипломдар, иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды. Бына улар:

**Руслан АБДУЛЛИН, Ейәнсура районы Өмбәт ауылынан,**

**Олиә СИТДИҠЙӘНОВА, Бөрйән районы Таңғатар ауылынан,**

**Зинира ШӘРӘФИЕВА, Тәтешле районы Үрге Тәтешле ауылынан,**

**Мәүҙиға БАЙМӨХӘМӘТОВА, Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылынан,**

**Ильяс ЯНБАЕВ, Баймаҡ районы Ҡаратал ауылынан.**

Шулай уҡ еңеүселәр араһында Илеш районынан журналыбыҙҙың күптәнге әүҙем дуҫы **Эльмира НАСЫРТДИНОВА** ла бар ине. Ул тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса беренсе урынға сыҡты.

Башҡорт телен һаҡлауға һәм шиғриәтебеҙҙе популярлаштырыуға индергән өлөшө өсөн ошо алты еңеүсене шулай уҡ «Педагогик китап» фәнни-методик үҙәге директоры Тимербулат Солтан улы Хоҙайғолов аҡсалата премия менән бүләкләне.

Аҙаҡтан Тәүәкән мәктәбендә уҡыусылар менән осраштыҡ. Сарала ҡатнашыусылар башҡорт әҙәбиәтенә, журналистикаһына ҙур өлөш индергән Венер һәм Рәмил Йәнбәковтарҙы йылы һүҙҙәр менән иҫкә алды, мәктәп уҡыусыларының күп һанлы һорауҙарына яуап бирҙе. Видеоконкурс еңеүсеһе, Борай ҡыҙы Олия Ситдиҡйәнованың Рәмил Йәнбәктең «Бер иларға ине» тигән шиғырын яттан һөйләүе бер кемде лә битараф ҡалдырманы.



Мәүҙиға Баймөхәмәтова менән.

1995 йылда Дауыт-Ҡайыпта үткән «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» байрамына Рәмил ағай композитор Айрат Ғайсин менән икебеҙҙе алып ҡайтҡайны. Ул замандан 28 йыл ваҡыт үтеп киткән. Ҡабырғатауға ла алып менгәйне беҙҙе ағайыбыҙ. Ауылдың зыяраты шул тауҙың ҡаршыһында ғына. Ул яҡҡа юлығыҙ төшһә, Ҡабырғатау янында туҡтамай үтмәгеҙ!

*Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,*
*«Ағиҙел» журналының баш мөхәррир урынбаҫары.*



«Кәбән ослау» шиғырына.
Илүзә СӘМСИУЛЛИНА, IV синыф.



Их, ҡыҫҡырып бер иларға ине,
Әсәйемдең ятып ҡулына...
Айгүзәл АБДРАХМАНОВА,
Х синыф.



«Ауыл урамында» шиғырына.
Әлиә ҒАФАРОВА,
Х синыф.

*Рәмил Йәнбәк ижады буйынса һүрәттәрҙе Күгәрсен районы Тәүәкән мәктәбе уҡыусылары төшөргән.*